

*МиЅниса БА№УМАНОВА*

# Бәхет ташы

**Фирма тарихынан**

*1967 й. — ”Туймазобурнефть” төҙөлөш участогы ”Туймазобурнефть” төҙөлөш-монтаж конторахы тип атала, артабан уны Өфө быраулау эштәре идаралығының төҙөлөш-монтаж участогы тип иҫәпләйҙәр.*

*1968 —1987 й. — ”Башнефть” производство ойошмаһының механикалаштырылған күсмә колоннаһы. Начальнигы — Тимеркәев Тимеркәй Тимеркәевич.*

*1987 йылдан һуң ойошма таркатыла.*

*1990 й., 1 апрель — ”Башнефть” производство ойошмаһының механикалаштырылған күсмә колоннаһы Тимеркәев Т.Т. етәкселегендә яңынан эшләй башлай.*

*1995 й., 12 июль — ”Башнефть” акционерҙар компанияһының Өфө төҙөлөш-монтаж фирмаһы теркәлә.*

*1997 й., 1 ноябрь — Ҡыпсаҡбаев Рәмил Булат улы фирманың директоры итеп билдәләнә.*

*2000 й. — ”Башнефть” Өфө төҙөлөш-монтаж фирмаһының яуаплылығы сикләнгән берлектәге йәмғиәте ойошторола.*



*Рәмил Ҡыпсаҡбаев*

Башҡортостанда ғына түгел, унан ситтә лә исеме киң билдәле шәхестәрҙән ул. Бигерәк тә нефть төҙөлөштәре өлкәһендә. Ҡалын кәүҙәле, буйсан был кеше аҙ, ләкин төплө һөйләр, күп эшләр, эштәрен яҡшы итеп тиҙ башҡарыр. Кешеләргә иғтибарлы, ярҙамсыл, ҡул аҫтындағыларға ғына түгел, үҙенә лә бик талапсан. Ваҡыт ҡәҙерен белеүсән... Ҡыҫҡаһы, ошо көндәрҙә илленен тултырған Ҡыпсаҡбаев Рәмил Булат улын берәй әҫәренең төп ыңғай геройы рәтенә индерә алыр ине бәгзе яҙыусылар.

Иллә мәгәр Рәмил Булат улы үҙен ундайҙарҙан тип иҫәпләмәй, ябай ғына кеше һанай...

Ысынлап та, ябай ғына ауыл малайы булып тыуған ул Ырымбур өлкәһенең Красногвардейский районындағы Түбәнге Яйыҡ ауылында уҡытыусылар ғаиләһендә. Бала сағында киң далала ҡолонсаҡтай үҫкәнендә шулай тип хыялланған: «Их, ниндәйҙер бер бәхет ташы табырға ла, шуға ҡарап, үҙ киләсәгенде күҙалларға ине...» Былдай хыял, күрәһең, нимәлер теләгәнендә, кем булырыңды, ҡайҙарға барырыңды, ниндәй эштәр атҡарырыңды әлегә аныҡ белмәгәндән киләләр. Шулай ҙа үҫмерҙең бер хыял-теләге үҙенә бик асыҡ төҫмөрләнә: тиҙерәк үҫеп етергә лә атай-әсәйгә, туғандарға терәк булырға! Ошолай уйланғандарында ул, моғайын да, Ҡаҙағстанға сығып китерен, Аҡтүбә тигән ҡалаға барып белем алырын, хәтһеҙ ваҡыт шул яҡтарҙа эшләрен күҙ алдына ла килтермәгәндер...

Ғаиләләре бик ишле була уларҙың. Атаһы Булат Әйүп улы менән әсәһе Фәтихә Хәйретдин ҡыҙына ун бер баланы тәрбиәләүе, үҫтереүе еңелгә төшмәгән, әлбиттә. Уҡытыусыларға ла тормош көтөүе анһат бирелмәгән бит ул йылдарҙа. Баланды уҡытып сығарыуы ла михнәтле генә. Төрлө ауырыу, бәлә-ҡазанан имен ҡалған алты баланы аяҡҡа баҫтырыу ҙа еңелдән түгел. Бына шунлыҡтан Рәмилгә Аҡтүбәләге 5-се һөнәрселек-техник училищеһын һайларға тура килә, сөнки унда ашаталар ҙа, кейендерәләр ҙә, һөнәр ҙә бирәләр дәүләт иҫәбенә. Ун һигеҙ йәше тулып етмәгән егет, шулай итеп, электр һәм газ менән иретеп йәбештереүсе һөнәре ала ла тиҙерәк ата-әсәһенә ярҙам итеү йөҙөнән хеҙмәт вахтаһына баҫа. Бер аҙҙан уға автобазаға күсергә тура килә, сөнки ул өй янында ғына



08-2001.p65 204 30.10.01, 11:40
Black

урынлашҡан, төшкө ашҡа ҡайтып йөрөрлөк һәм әсәһенә ҡул ярҙамы күрһәтерлек мөмкинлек бар. Армияла ике йыл хеҙмәт итеп ҡайтҡас, шул уҡ Аҡтүбәлә (өйрәнгән ер яу ҡайтарырға яҡшы тигәндәй) слесарь була, 100-сө һөнәрселек-техник училищела мастер вазифаһына күсә...

Бында шуны билдәләп китеү мөһим: Рәмил Ҡыпсаҡбаев сит-ят яҡтарҙа, беренсенән, ныҡлы-нигеҙле белем алһа, икенсенән, төрлө коллективта, ҡырылмаһа ҡырҡ ата балалары араһында бай хеҙмәт һәм тормош тәжрибәһе туплай. Кешеләр менән аралашырға ла өйрәнеү, теге йәки был эште урын-еренә еткереп башҡарыу оҫталығына ла эйә булырға кәрәк бит әле. Етмәһә баяғы 100-сө һәм 5-се профтехучилищеларҙа мастер булып эшләгәнендә коллективҡа етәкселек итеү кеүек ауыр мәктәптең баҫҡыстарынан ярайһы уҡ ҡыйыу өҫкә атлай ул. Йәш кешенең төрлө яҡлап күренәәсыла барған матур сифаттарын ҡайҙа ла баһалайҙар бит инде: Рәмилде Аҡтүбәлә яратҡандар, хөрмәт иткәндәр; бер аҙҙан тағы ла юғарыраҡ үрләү мөмкинлеге лә юҡ түгел, етмәһә. Бүтәнсәрәк итеп әйткәндә, бала саҡ хыялындағы бәхет ташы табылып, киләсәген аныҡ ҡына күҙаллау-билдәләү мөмкинлеге ҡулына эләгә Ҡаҙағстан ерендә, ләкин егеттең биографияһында ҡырҡа һынылыш яһалды ла ҡуйҙы шул: Башҡортостанға китергә дәрт итмәһенме бер саҡ! Яңауыл районы ҡыҙы Винера тартып алды уны был яҡтарға.

Хикмәт бында нимәлә һуң? Рәмил Булат улы аңлатыуынса, ул бала саҡтан әсәһенең тыуған ере — Ғафури районына йыш барып йөрөгән, Башҡортостандың бәғзе төбәктәрендә лә булғылаған — ошо яҡтар күңелен үҙенә тыйып алғыһыҙ тартҡан да тартҡан...

Ырымбур өлкәһендә лә, Ҡаҙағстанда ла етмешенсе йылдар уртаһында башҡорт булып ҡалыуҙары, башҡорт булараҡ зауҡын-рухыңды ҡандырыуҙары мөмкин түгел ине шул. Башҡортостанда иһә билдәле бер кимәлдә быға шарттар тыуҙырылғайны, шуға ла ул 1975 йылда күсте лә ҡайтты ошо яҡтарға.

Ысын-ысындан Рәмилдең «бәхет ташы» Башҡортостанда ятҡан икән дәһә! «Өфөнефть»идаралығының төҙөлөш-монтаж идаралығына эшкә килде ул. Электр һәм газ менән иретеп йәбештереүсе булып... Хәтерегеҙҙәме, үҙенең хеҙмәт юлын ул тап ошо вазифанан башлағайны Аҡтүбәлә. Үҙ илендә солтан булырға ҡайтмағанын аңлай ине егет, түбән дә төшмәне һис, ә бындағы, Башҡортостандағы, шарттарға яңынан өйрәнде. Яңы кешеләргә, яңы коллективҡа өйрәнде, өр-яңы хеҙмәт юлы үтте. Был үҙенә күрә ҡыйыулыҡ-батырлыҡ ине. Өс йыл эсендә Рәмил Булат улы мастер, шунан прораб булып эшләй. Прорабтан иһә әлеге төҙөлөш-монтаж идаралығының баш инженеры вазифаһына, ә бынан иһә булдыҡлы егетте идаралыҡтың начальнигы итеп үрләтәләр. Иҫкәртеп китәйек, Рәмил эштән айырылмайынса уҡып, 1996 йылда Өфө авиация институтын тамамлай. Был да егәрлелек, ныҡышмалылыҡ, үҙеңә талапсанлыҡ билдәһе. Артабан «Башнефть» акционерҙар компанияһының Өфө төҙөлөш-монтаж фирмаһына директор итеп ҡуялар уны. Ошо вазифаһында Рәмил Ҡыпсаҡбаев бына дүртенсе йылын тултырып килә. Ошонда уҡ уға «Башҡортостандың атҡаҙанған төҙөлөш хеҙмәткәре» исеме бирелә. Шулай итеп, уның сирек быуаттан ашыу хеҙмәт юлы нефтселәр менән бәйле.

Башҡортостанда ул Уҙыбаш, Боҙаяҙ, Ләмәз, «Искра» һәм башҡа нефть ятҡылыҡтарын үҙләштереүгә, «ҡара алтын» сығарыусыларға уңайлы шарттар тыуҙырыуға күп көс түгә. Ул үткәргән торбаларҙы километрлап, ул ҡалҡытҡан биналарҙы квадрат метрлап һанай киткәндә лә журналдың бер нисә бите тулыр ине... Шулай ҙа бәғзеләрен атап китәйек: нефть ятҡылыҡтарын химия продукттары менән тәьмин итеү базаһы, төрлө урындарҙа ете автозаправка станцияһы, Өфөлә, Нефтекамала, Яңауылда 20939 квадрат метрлыҡ фатирҙар — 1998—2000 йылдарҙағы уның хеҙмәт уңыштары.






08-2001.p65 205 30.10.01, 11:40
Black

Был осорҙа фирмала башҡарылған төҙөлөш-монтаж эштәре күләме дүрт тапҡырға күтәрелә.

Әлеге ваҡытта Ҡыпсаҡбаев етәкселек иткән коллектив нефть сығарыу буйынса 9, бырауылау буйынса 2 идаралыҡты хеҙмәтләндерә. Уларҙың 6 цехы бар: Өфө, Яңауыл, Нефтекама төҙөлөш-монтаж цехтары, транспорттарҙы механизациялау, ағас эшкәртеү һәм тимер-бетон изделиелары цехтары. Ишембай, Октябрьский ҡалаларында ике төҙөлөш майҙаны эшләй. Базаһы Кураскoво эшселәр ҡалаһында урынлашҡан. Төп эштәренән тыш Рәмил Булат улы етәкләгән фирма байтаҡ бүтән объекттар төҙөй. Мәҫәлән, Өфөлә Профессиональ ауырыуҙар институты бинаһы, 2-се стоматология хәстәханаһы... Әйткәндәй, фирма Өфө районы бюджетына (төп контора Кураскoво ҡасабаһында урынлашҡанлыҡтан) 1998 йылдан алып 2001 йылдың 31 мартына тиклем 40,7 миллион һумлыҡ һалым индергән, байтаҡ балалар баҡсаһын, мәктәптәрҙе, район хәстәханаһын, Дмитриевкала һыу башняһын ремонтлаған, ундағы дауаханаға ҡорамалдар алыуға, Чапаев исемендәге музейҙы төҙөкләндереүгә ярҙам күрһәткән... Эйе, һанай китһәң, үрҙә әйткәнебеҙсә, урын етмәҫ.

Рәмил Ҡыпсаҡбаев ҡулы аҫтында бөгөн 1600-ләп кеше эшләй. Фирманың баш инженеры Яҡупов Салауат Ғайнислам улы, Өфө төҙөлөш-монтаж цехы етәксеһе Ниғмәтуллин Марат Йәүҙәт улы, директор урынбаҫары Попов Сергей Петрович, призводство-техник бүлеге начальнигы Ҡансурина Рәйсә Йәғәфәр ҡыҙы уның эшлекле штабын тәшкил итә. Йыл да Рәмил Булат улы «үҙенекеләргә» 10 фатир бүлергә тырыша. Тимәк, йөҙләгән кешене бәхетле итә, был иһә хәҙерге ауыр заманда Башҡортостанда торлаҡ мәсьәләһен уңышлы хәл итеүгә һәлмәк кенә өлөш тигән һүҙ. Шунан, Ҡыпсаҡбаев фирмаһы төҙөгән йорттарға Өфөлә лә, унан башҡа ерҙәрҙә лә байтаҡ халыҡ күсенә икәнлеген онотмайыҡ. Нефтекама ҡалаһында, Красный холм ҡасабаһында төҙөлгән ятаҡтарҙа йәш ғаиләләр урын ала. Йәнә лә әллә ҡайҙарҙан ул торбаһын, ул цементын, ул таҡтаһын, ул бүтәнен һорап киләләр, директор барсаһын хәл итеп өлгөрөргә тейеш. Башҡортостан өсөн, республика халҡы һәйбәт йәшәһен өсөн бит... Таҡта тигәндән, шуны ла әйтеп үтәйек: фирма Германиянан барлыҡ ҡорамал-уты менән тотош бер ағас эшкәртеү цехы һатып алған. Хеҙмәт барышын еңеләйтеү маҡсатынан сығып яһалған был аҙым. Фирма әүәле фәҡәт заказдар буйынса эшләһә, хәҙер үҙҙәренә ер һатып алып профилакторийҙар, ял урындары, фатирҙар һала һәм унда йәшәү өсөн уңайлы шарттар тыуҙыра. Заман зауығы менән төҙөкләндерелгән Красноусольск, Янғантау санаторийҙары ял итеүселәрҙе күптән ҡыуандырҙы.

— Тырышһаң, бөгөн әпәй бар инде, — тип коллектив эшенә ҡарата бик инсафлы ғына һығымта яһап ҡуйғайны директор бер әңгәмәбеҙҙә. Хәҙерге баҙар иҡтисады заманында ҡайһы берәүҙәргә тап ана шул тырышлыҡ етешмәй ҙә инде, элеккесә хөкүмәт килтереп биргәнде көтөп ултырабыҙ ҙаһа... Йәһиһә Алланан ялбарабыҙ. Аллаға ышаныу күңел таҙалығы өсөн кәрәктер ҙә ул, иллә мәгәр үҙ көсөң һәм аҡылыңа ныгыраҡ ышаныу фарыз, ялҡаулыҡҡа юл ҡуймау мөһим.

Фирмала тырыштар күп. Әхмәҙиев Илһам Йәғәфәр улы бригадаһы "Дело мастера боится — 98" күргәҙмә-конкурсында еңеп, 1-се урынды яулаған. Ошондай уҡ 97-се йылғы ярыш һөҙөмтәһе буйынса Муллаянов Рәмил Әғзәм улы бригадаһы еңеп сыҡҡан булған.

Типһә тимер өҙөрҙәй ир уртаһы йәшенә еткән Рәмил Ҡыпсаҡбаев үҙ көсөнә һәм аҡыл-тәжрибәһенә генә түгел, ә бергә эшләгән иптәштәренә таянып эшләй һәм кешеләрҙең был тормошто биҙәр өсөн ерҙә йәшәргә тыуғанлығына ышанып йәшәй. Шуға ла үҙенә һәм кешеләргә бик талапсан, тәртип ярата, ваҡыттың һәм кешеләрҙең ҡәҙерен белә. Шуға ла кешеләргә һәйбәтерәк йәшәү һәм эшләү өсөн мөмкин булған барлыҡ шарттарҙы тыуҙырырға тырыша. Башҡортостаныбыҙ башҡорт улы Ҡыпсаҡбаев Рәмил тигән улынан, ә ул Башҡортостандан унды тиергә генә ҡала...





08-2001.p65 206 30.10.01, 11:40
Black

*В июльском номере в рубрике «Районы, города» представлен город Октябрьский, который отмечает в этом году свое 55-летие. Глава администрации города, руководители предприятий и организаций рассказывают о делах и заботах сегодняшнего дня.*

*Статья политолога Мансура Аюпова называется «Российский федерализм и перспективы развития Башкортостана». Арсен Еникеев пишет о правах, регулирующих отношения в башкирском обществе. В рубрике «Экономика» статья журналиста В.Гайнетдинова о развитии малого предпринимательства в республике.*

*В издательстве «Китап» выходит книга публициста М.Кутлугаллямова «Сумерки века». Отрывок из нее предлагается вниманию читателей.*

*Доцент БГУ А.Акманов изучил историю межевания Урман-Кудейской и Кубовской волостей в условиях обострения земельных отношений в XVIII—XIX вв. В статье М.Надергулова говорится о творчестве башкирского ученого XIX века Гарифуллы Киикова, оставившего богатое и многогранное творческое наследие.*

*«Голос курултая» познакомит с работой исполкома курултая башкир Сафакулевского района Курганской области, расскажет о его связях с Башкортостаном.*

*Литература представлена стихами К.Аралбая, Р.Хакимьяна, новым рассказом С.Бадретдинова и продолжением романа «Меч Урала» Р.Шарипова.*

*Статья профессора А.Азнабаева раскрывает некоторые особенности башкирского языка. Дастан «Лейля и Меджнун» — один из классических образцов романтических произведений арабских, персидских и тюркских народов средневековья—опубликован с комментариями Гайсы Хусаинова.*

*В рубрике «Образование» педагоги Е.Шевалдина и Г.Суслина озабочены состоянием здоровья детей в республике и работой по его улучшению.*

*Под рубрикой «Здоровье» главный врач Центра медицины катастроф К.Шакуров знакомит с работой этого ведомства.*

*В «Мире женщины» — статьи о роли женщины-матери в башкирской традиции и о взглядах современной женщины на семью и общество.*

*Исполняется 160 лет со дня рождения великого башкирского ученого, просветителя и поэта М.Уметбаева. О его научной и творческой деятельности статья доктора филологических наук Г.Кунафина.*

*The July issue represents the town of Oktyabrsky, which celebrates its 55$^{th}$ anniversary this year. The head of the administration of the town, directors of enterprises and organizations tell about today's progress and problems.*

*Next rubrics contain articles «Russian Federalism and Prospect of Development of Bashkortostan» by a political scientist Mansur Ayupov and «Common Law of the Bashkorts» by Arsen Enikeev.*

*Under the heading «Economy» the journalist V.Gainetdinov tells about the development of small-scale business undertakings in the republic.*

*We offer fragments from the book of the publicist M.Kutlugallyamov called «Century Twilight».*

*The senior lecturer of the Bashkir State University A.Akmanov studied the history of land-surveying of the Urman-Kuthay and Kuba volosts in conditions of the aggravation of land ownership relations in the XVIII—XIX centuries.*

*The article of M.Nadergulov is about the creative activity of the Bashkort scientist of the XIX century Garifulla Kiikov.*

*«Koroltai Voice» describes the work of the Executive Committee of the Koroltai of the Bashkorts of the Safakul district of the Kurgan region and its contacts with the Republic of Bashkortostan.*

*In «Literature» you can read verses by Kathim Aralbai, Radik Khakimyan, a new story by Salimyan Badretdinov, and continuation of the novel «Ural's Sword" by Renart Sharipov.*

*Professor A.Aznabayev gives his ideas on some features of the Bashkir language.*

*Gaisa Khusainov represents one of classical samples of romantic works of the Arabian, Persian and Turkic peoples of the Middle Ages called «Layla and Madgnun».*

*Teachers E.Shevaldina and G.Suslina speak about the state of health of children of the republic. Their articles are published in the rubric «Education».*

*The head physician of the Disaster Aid Centre K.Shakurov lays bare the activity of this department.*

*«Woman's World» analyses the role of a woman-mother in the Bashkir tradition, views of modern women on family and society.*

*Doctor of Science (Philology) G.Kunafin was able to bring to light the scientific and creative activity of the great Bashkir scientist, enlightener and poet M.Umetbayev.*



08-2001.p65 207 30.10.01, 11:40
Black